*Валерий ҒӘЙНЕТДИНОВ*

# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘ

Баҙар ҡанундары күп предприятиеларҙың сифатлы, халыҡ һорауы менән ҡулланған продукция етештерә башлауына этәргес булды. Көн талабына барыһы ла яраҡлаша алмаһа ла, күбеһе конкуренцияға һәләтле тауарҙар эшләп сығарыуға өлгәшеп кенә ҡалманы, донъяла тиңе булмаған әйбер төрҙәрен дә үҙләштерә алды. Республика иҡтисадында яңы тармаҡ барлыҡҡа килеүен — заманында троллейбустар һәм трамвайҙар ремонтлау предприятиеһы итеп ойошторолған заводтың Башҡортостан троллейбус заводына әүерелеүен ошондайҙар рәтенә индерергә кәрәк.

Уны ойоштороуға егерме йыл тулды. Ошо ваҡыт эсендә заводҡа илебеҙҙең төрлө нөктәләренән — «Владивостоктан алып Брестҡа ҡәҙәр», туҙған, иҫкергән, тутыҡҡан машиналарҙы ремонтҡа алып килделәр. Бында иһә троллейбустарҙы яңыртып, кире оҙата торҙолар. Завод айлыҡ план буйынса 20 машина ремонтларға тейеш булһа, коллективтың тырышлығы менән был һан 25-тән төшмәне. Шул уҡ ваҡытта троллейбустар эшләү тәжрибәһе лә тупланы башҡортостанлылар. Бәлки артабан да шулай дауам итер ине, әммә, илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙар осоро башланып китте һәм яйға һалынған элекке ҡалыптар пыран-заран килде. Был завод та, ҡалған күптәр кеүек үк, иҡтисад көрсөгөнә килеп терәлгәйне. 1991 йылдан башлап етештереү күләме түбән тәгәрәне. Кризис Энгельс ҡалаһында урынлашҡан Урицкий исемендәге троллейбустар етештереүсе завод-гигантты ла урап үтмәне. Машиналар ҡиммәт булғанлыҡтан ҡала муниципалитеттары троллейбус һатып алыуҙан баш тартты. Завод көрсөккә килеп терәлде. Заман баҙарының был кәштәһе бушаны. Ә сит ил предприятиелары, мәҫәлән, «Сименс» һәм «Шкода», ул бушлыҡты күҙләй ҙә башлағайны. Башҡортостандың троллейбус һәм трамвайҙар ремонтлау заводына ошо ваҡыт яңы етәкселек килә. Уның генераль директоры итеп элек ошонда уҡ баш инженер булып эшләгән Владимир Барсуков тәғәйенләнә. Улар ошо буш торған кәштәне тултырыу фекерен күтәреп сыға ла инде. Уҙған дүрт йыл эсендә предприятие троллейбус ремонтлауҙан уны етештерә башлауға күсә алды. Республикабыҙ етәкселеге предприятиеның хәлен тикшереп, дотация бүлеүҙе хәстәрләне. Һөҙөмтә үҙен көттөрмәне — завод ныҡлы аяҡҡа баҫып, донъя кимәлендәге троллейбустар етештереүгә өлгәште. Унан сыҡҡан машиналарға хәҙер бер аҙ күнегелһә лә, Башҡортостан троллейбустары ҡалғандарҙан айырылып тора. Былтыр Башҡала көнөнә завод эшсәндәре бүләк иткән, үҙгәртеп, яңыса ҡоролған «беренсе ҡарлуғастар» ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә халыҡ һөйөүен яулап өлгөрҙө. «БТЗ 5276-01» маркалы троллейбусты эшләүгә завод конструкторҙары ни бары ярты йыл сарыф итте. Уның тышҡы дизайны Башҡортостан һәм Рәсәй юлдарын күптән үҙ иткән «Мерседес-Бенц» автобустарына тартым. Яңы машинала пневмоприводлы өс ишек урынлаштырылған. Троллейбус йөрөтөүсенең кабинаһы ҙурайтылып, идара итеүгә уңайлы, еңел һәм ипле булһын өсөн күп кенә яңы техник табыштар ҡулланылған. Салонға тоноҡландырылған тәҙрәләр ҡуйылған. Ултырғыстар «Икарус»тарҙыҡы кеүек йомшаҡ итеп эшләнгән. Башты терәп бераҙ серем

итеп барыу мөмкинлеге лә ҡаралған. Салон ҡәҙимге троллейбустарҙыҡынан ҙур ҙа, бейегерәк тә. Заман техникаһы хәрәкәт иткәндә элекке тауыш һәм «олоу» ишетелмәй, тип әйтерлек, сөнки мотор-генератор урынына өфөләр ток үҙгәртеүсе (преобразователь тока) ҡорамал ҡуйғандар. Элек электр ҡорамалдары троллейбустарҙың аҫтында булһа, беҙҙекеләр уны ҡыйыҡҡа күсергән. Шулай итеп, бысраҡ, һыу, ҡар шарттарында эшләгән, йыш ҡына корпусҡа ток биргән электр ҡорамалдары өс ҡат изоляция менән хәҙер өҫкә урынлаштырылған, Был яңылыҡтың тағы бер яҡшы яғын әйтеп китергә кәрәк. Күбеһе иҫләйҙер, эҫе йәй көнөндә троллейбустарҙың иҙән аҫтынан ҡыҙған һауа бөркөлә. Ул кузов аҫтында урынлаштырылған, моторҙы эшләтеп ебәреүсе ҡорамалды һыуытып тороусы ел өргөстән килә. Яңы троллейбустарҙа ундай нәмә юҡ, сөнки ул ҡыйыҡҡа сығарылған. Ҡыш көнө салонды йылытыу өсөн махсус «мейестәр» тора.

Ҡыҙыу китеп барған троллейбустың «мыйыҡтары» ысҡынып китһә, ҡолаҡ тондорғос гөрһөлдәү барлыҡҡа килә. Хәҙер ул «мыйыҡтар» тимерҙән түгел, капрондан эшләнгән һәм ни бары дүрт килограмм ғына ауырлыҡта. Былтыр йыл башынан алып баш ҡалабыҙҙа егерменән ашыу, Стәрлетамаҡта бер тиҫтә, Рәсәйҙең егермегә яҡын ҡалаһында Башҡортостан троллейбустары халыҡҡа хеҙмәт итә башланы. Ә Республика көнөнә завод эшсәндәре тағы бер бүләк әҙерләне. Ул — транзисторлы троллейбус. Яңы быуын техникаһының тартыусы электр двигателе менән идара итеү системаһы контактлынан транзисторлыға әйләндерелгән. Тағы бер яңылыҡ: был төр троллейбустарҙың подвескалары рессорлынан пневмогидравликалыға алмаштырылған. Тимәк, элек троллейбус юлында осраған һәр соҡор, түмгәкте һанап барһа, хәҙер ул бәүелтеп кенә йөрөтәсәк. Яңы төр машиналар хәүефһеҙлеге, уңайлыҡтары, хеҙмәт итеү ваҡыты менән дә элеккеләрҙән күпкә өҫтөн. Завод машинаның ун йыл эсендә 540 мең километр (+10 процент) «йүгерәсәген» гарантиялай. Ә хаҡы инде Энгельс ҡалаһында етештерелгәндәрҙән 2,5 тапҡырға осһоҙораҡ — 1,5 миллион һум тора.

Машинаның маҡтауға лайыҡ яҡтары күп, әлбиттә. Яңы төр троллейбусты эшләүе шулай еңелме ни, тип һорар уҡыусы. Һәм ҡайҙа бит әле, иҡтисади ҡыйынлыҡтар арҡаһында коллективтың яртыһын юғалтҡан ремонт заводында! Әлбиттә, был улай түгел. Троллейбус бер нисә мең төр деталдән тора. Шулай булғас, матди база ла, белгестәр ҙә кәрәк.

Башҡортостан троллейбус заводы етештергән машиналар был тармаҡҡа бик күп яңылыҡ индерә һәм троллейбус эшләүҙе ҡырҡа үҙгәртә. Уны тормошҡа ашырыуҙа Мәскәүҙең Тармаҡ фәндәр академияһы, Автоматика институты, Санкт-Петербургтағы Электр транспорты идаралығы, Урал-Себер зонаһының 4-5 фәнни-етештереү оборона фирмаһы ҡатнашты. Республикабыҙҙың күп кенә предприятиелары ла ситтә ҡалманы. Әммә был ғына аҙ, троллейбустарҙы комплектлаусыларҙың күберәк өлөшөн үҙебеҙҙә етештерә алабыҙ. Быға бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Тәҙрәләрҙе — «Салауатстекло», артҡы күсәрҙәрҙе — Ишембайҙың «Трансмаш»ы, электр ҡорамалдарын — Октябрьский ҡалаһы, кабель һәм ток үткәргестәрҙе — «Уфимкабель», резина, пластмас изделиеларын Өфө эластомер материалдар һәм конструкциялар заводы етештерә ала. Республика предприятиелары отошло заказдар алыуҙан тыш, өҫтәмә эш урындары булдырыуға ла өлгәшер ине. Әле Рәсәйҙә троллейбустар паркының 70 проценттан күберәге иҫкергән. Тимәк, Башҡортостан троллейбус заводына эш етерлек.

Завод быйыл Өфө юлдарына тағы егермеләп машина ебәрергә уйлай. Ә заказдар булғанда коллектив йылына 200 тирәһе троллейбус эшләп сығарыу һәләтенә эйә. Әйткәндәй, заводыбыҙ продукцияһының сифатын дәлилләгән сертификат һәм фирма билдәһе лә яҡын киләсәктә күренә башлаясаҡ.